# Әхиәр Хәкимов





- Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтҡанда йәш һалдаттың күкрәген «Ҡыҙыл Йондоҙ ордены» (1945), «Батырлыҡ өсөн» миҙалы (1944), «Венаны алған өсөн» миҙалы (1945 йылдың декабре), «Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн 1941–1945 йй.» миҙалы биҙәй. 1985 йылда II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнә.

- Әҙәбиәт өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн Әхиәр Хәким «Почёт Билдәһе» ордены (1979), Халыҡтар дуҫлығы ордены, һуғыш темаһы өҫтөндәге уңышлы эштәре өсөн Ғәлимов Сәләм исемендәге премия (1980), «Ҡуштирәк» һәм «Һауыр ҡумта» романдары өсөн Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы (1984), «Думбыра сыңы» китабы өсөн РСФСР-ҙың М. Горький исемендәге дәүләт премияһы (1989) менән бүләкләнә. 1985 йылда РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре исеме бирелә. 2001 йылда «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ була. Яҡташтары тарафынан әҙип Дәүләкән ҡалаһының почетлы гражданины итеп һайланған.

- 2003 йылдың 27 декабрендә Мәскәүҙә Әхиәр Хәсән улы донъянан китә, Өфөнөң Мосолман зыяратында ерләнә.